*Лариса* ***АБДУЛЛИНА***

# Хыялдарҙан усаҡ яҡҡан шағир

Шағирҙарҙы йондоҙҙарға ҡарап йәшәгән заттарға тиңләйҙәр. Барҙыр инде бының берәй хикмәте. Әҙәм балалары көндәлек мәшәҡәттәргә алданып, мал артынан ҡыуған бер мәлдә тап һүҙ сәнғәте әһелдәре, сәсәндәр рухи юғарылыҡ, кешеләрҙең ерҙәге бурысы ҙурыраҡ булыуы хаҡында иҫкәртмәйме икән? Игеҙәк йондоҙлоғо аҫтында тыуған шағир хаҡында кәлимәм. Студент саҡтан “Дамир ағай” тип өндәшкән ижадсы Дамир Шәрәфетдинов булыр ул.

Классиктарҙың береһе әйткән бит әле: һәр яҙыусы ниндәйҙер кимәлдә үҙе хаҡында яҙа, тип. Был, ысынлап та, шулайҙыр, сөнки ижадсы булып танылыу өсөн ихласлыҡ, күктәрҙән килгән моңдоң ҡағыҙға тере килеш һалыныуы зарур. Йөрәгеңдең иң түрендә ятҡан хис-тойғолары, зиһененең аулаҡ мөйөштәрен сүкегән уйҙары менән уртаҡлаша. Бөгөн күптәр ҡулына ҡәләм алды. Әлбиттә, бының ыңғай ҙа, кире яғы ла бар. Беренсеһенә дәлил — халыҡ китап уҡый, ижадҡа ынтыла, матбуғат менән бәйләнешен өҙмәҫкә, донъяға матурлыҡ аша бағырға тырыша. Әммә икенсе фекерҙе лә иҫбатлап була — һәр кем яҙышып ҡына ҡалмай, ә матбуғатта ла баҫылырға ынтылғас, зауыҡ төшөнсәһе юғала, уҡыусы ысын ижад менән эшләнгән әҫәрҙәрҙең айырмаһын юғалта башлай. Ә Дамир Шәрәфетдиновҡа килгәндә, ул һәр саҡ үҙен ҡыҙыҡһындырған, үҙе белгән, белмәһә, белергә ынтылған нәмәләр хаҡында яҙа. Ул шағир маһирлығын журналист һөнәренә лә еккән ижадсы. Дамир Мөлкаман улы — һәр саҡ уйлы, бәхәсле, төбөнә тоҙ ҡойғансы әңгәмә ҡороусы шәхес. Кешенең асылы икеләнеүсән. Шуға күрә Дамир Шәрәфетдиновтың бер китабы “Икеләнеү” тип аталыуы ла һис юҡҡа түгел. Үҙеңдең икеләнеүеңде, һәр саҡ һайлау алдында тороуыңды таныу — үҙе бер батырлыҡ. Бәндәләр үҙҙәрен көслө итеп күрһәтергә яратыусан. Шуныһы ҡыҙыҡ: Дамир әле генә яҡшы тип иҫбатлаған әҫәрен бер нисә минут үткәндән һуң тар-мар итеп ташлауы ла ихтимал. Әлбиттә, уның был сифатын башлап ижадҡа килгән ҡәләм тирбәтеүсе аңлап та етмәүе мөмкин. Бигерәк тә кемгәлер эйәреп, ҡалыплашҡан стиль менән яҙғандар уның янынан алыҫыраҡ йөрөй. Үҙеңдән, үҙәгеңдән сыҡҡан ауаз кәрәк уға. Ундайҙар бар, буласаҡ. Шағир Дамир Шәрәфетдинов хаҡында һүҙ алып барғанда, XXI быуат шиғриәтенең асылы — рухи үҫешендә күңел ҡыйралыштары, яҡты табыштары, үкенесле юғалтыуҙары аша булһа ла кеше бәҫен күтәреп йәшәгән яңы замандың нескә күңелле лирик геройының эске донъяһы күҙаллана.

Яңыраҡ 50 йәшлек юбилейы уңайынан З.Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә донъя күргән “Төнгө усаҡ” йыйынтығында шағирҙың төрлө жанрҙағы шиғри әҫәрҙәре тупланған. Уҡыусыһы менән күңелен асып һөйләшкән, серләшкән ижадсы берсә ярһыу, баш бирмәҫ зат булып күҙ алдына баҫа:

Тәбиғәттең моңға тулған сағы.
Тараҡҡандай тәрән серҙәрен,
Тирәктәрҙең аҡһыл бурандары
Аяҙ күктең юя зәңгәрен.

Хәтеремдең иң-иң түрҙәренән
Ҡитмәҫ ошо ҡапма-ҡаршылыҡ:
Тәбиғәттә тирәк бурандары,
Күңелемдә шундай саф тынлыҡ...

Икенсе ҡараһаң, сабыр ғына төнгө усаҡ йылыһына йәндәре өшөгәндәрҙе йыя, өмөт тарата:

Иләҫләнеп бирәү көткән саҡта,
Йәйме йәлләр унан үҙ моңон?
Ҡырыҫлығы, сабыйлығы ҡайтҡан
Һәм хис-наҙы, сабырлығы артҡан
Йәйҙәремдә тапҡан тойғоноң.

Алда әйткәнемсә, шағирҙың икеләнеүсән, эҙләнеүсән асылы фанилыҡта үҙ юлын эҙләй:

Дөм бушлыҡтағы ул йондоҙ —
Ҡотопта йылы өмөт.
Барып етә алмаһаң да,
Йәнеңдә нурын йөрөт.

Нескә һағыш, әйтеп аңлатып бөткөһөҙ һыҙланыуҙар менән һуғарылған китап ямғырҙан һүң ҡабынған усаҡты хәтерләтә. Автор ҡыланмай ҙа, яҡшы-яман булып күренергә лә тырышмай, аҡыл өләшмәй, бары тик күңел тойғоларын тирә.

Әҙиптең тыуған яғы уның ижадына тәрән йоғонто яһағанын яҡшы беләбеҙ. Тау шишмәләренең саф һалҡынын, бейек ҡаяларҙағы һауа тынын тойғандай булам уның яҙғандарынан:

Йәмәлекәй йыры йәнгә ҡаға:
"Тарихтарҙа, һай, күп ҡабатлау!"
Һин — иҫкәртеү шуны халыҡтарға.
Ошомолор серең, Ямантау?
...Шау-шыуҙарҙы тауҙар яратмай...

Йәки:

Эй, ҡыуанды шишмә,
Тик, ышыҡлап,
Төн йәшерҙе уның шат йәшен.
Белә лә һуң, һирәк ҡайтҡанымда
Барына ла көнөм етмәҫен...

Был шиғырҙар барыһы ла яңы — уларҙа миңә таныш түгел кисерештәр, Дамир ғына асҡан донъя, шағирҙың йөрәгенән генә тамған моң:

Ғүмер остарында үҙ-үҙеңдән
Ниндәй ҡыйын икән алданыу:
Мин, баҡтиһәң, тик ярында икән
Ваҡыт тигән оло даръяның!
Хыялдарҙан усаҡ яғамын...

Журналистика белгесе В.Прохоров, битарафтар, күпме генә тырышып, мәҡәлә артынан мәҡәлә яҙһа ла, бер ҡасан да ысын журналист була алмай, тигән фекер әйткән. Был ысынлап та шулай икәнен ваҡыт ҡына түгел, матбуғат баҫмаларында даими сығып килгән яҙмалар үҙҙәре үк раҫлай. Көн дә тиерлек гәзиттәр, ай һайын журналдар донъя күрә, әммә һирәктәрҙең генә яҙмаһы уҡыусы иғтибарын яулай.

Билдәле шағир, журналист Дамир Шәрәфетдиновты көтөп алынған авторҙар исемлегенә индерер инем. Ул битараф түгел заттарҙан, тип әйтеү генә аҙ. Күрәһең,

күктәр ярһыулыҡты, һиҙгерлекте өләшкәндә, Дамирға әллә нисә кешенең өлөшө бер юлы эләккәндер.

Уның менән “Йәшлек” республика йәштәр гәзитендә бергә эшләнек, шуға күрә ҡәләмдәштең журналистика өлкәһендәге оҫталығын ишетеп, уҡып ҡына түгел, эш барышынан танып беләм. Беҙҙең йәмғиәттә шулай ҡоролған: яҙыусы ижад итеүҙән тыш, мотлаҡ ғаиләһен, үҙен тәьмин итеү өсөн ҡайҙалыр эшләргә тейеш. Әҙиптәрҙең күбеһе ваҡытлы матбуғат баҫмаларында көс түгә. Ҡәләм оҫталарының яҙыу ҡеүәһе төрлө булған кеүек, тәүге ҡарашҡа еңел тойолған журналист маһирлығына ла һәр кем өлгәшә алмай. Күптәнге ҡағиҙә: һәр яҙыусы журналист була алмаған кеүек, һәр журналист та яҙыусы түгел. Бер ҡараһаң, был ике һөнәр бер-береһен тулыландырып, йәнәш йәшәй, әммә гәзиттә ҡайнаған көндәлек хеҙмәттең көсөргәнешен һәр яҙыусы күтәрә алмай. Бәлки, күтәреү ҙә кәрәкмәйҙер, сөнки ижадҡа ваҡыт аҙ ҡала, шиғыр-хикәйәгә инеп китерҙәй образдар, фекерҙәр мәҡәләләргә инеп юғалғандай була. Юғалғандай була, әммә Дамирҙың мәҡәләләрендә түгел. Ваҡытлы матбуғатты күҙәтеп барыусы күптән инде уның шағир ҡәләменән тамған мәҡәләләрен, йәнле һүрәтләмәләрен, аналитик уйланыуҙарын ҡыҙыҡһынып уҡый, көтөп ала.

Дамирҙың яҙғандары “һоро” журналистиканан нимәһе менән айырыла һуң? Иң беренсе сиратта, ул һис ҡасан да белмәгән, үҙенә таныш түгел ғәмәлдәр хаҡында яҙмай. Уның геройҙары — яҙыусылар, ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, спортсылар, урмансылар һәм беҙҙең арала йәшәгән башҡа һөнәр эйәләре. Ҡәләмдәшем яҙғандарын ҡоро маҡтауға ғына ҡормай, уның материалдарында анализ, теманы аңларға, өйрәнергә тырышыу ярылып ята. Шағирә булараҡ, шуны хуплайым: Дамир бик күп ҡәләмдәштәргә өлгө күрһәтеп, яҙыусы замандаштарының яңы сыҡҡан китаптарына даими рәүештә анализ яһап килә. Иң һуңғыларынан — Ә.Үтәбаевтың “Үрелеп алған алма”, Р.Ураҙғоловтың “Аслыҡ” йыйынтыҡтары хаҡындағы ентекле мәҡәләләр үҙҙәре генә ни тора!

Дамир ярһыу рухлы журналист, ул һис ҡасан да битараф түгел. Ошо сифаты уның яҙғандарын “тере” итә, әйтерһең, әле яңы ғына бешеп сыҡҡан ризыҡ. Эйе, ризыҡ, тик йән аҙығы. Әгәр гәзит-журнал уҡыусылар иғтибар итһә, Д.Шәрәфетдинов имзаһы менән ваҡытлы матбуғатта даими рәүештә “Реплика” йәки “Журналист саң ҡаға” рубрикаларында яҙмалар донъя күрә. Яҙыусы булараҡ, уны китаптарҙың зауығы ғына түгел, уларҙағы хәреф хаталары ла сығырынан сығара. Ул утһыҙ ҡалған ауыл халҡы яҙмышына ла битараф түгел, артистарҙың мәғәнәһеҙ йырҙар башҡарыуы ла борсой, бәлки, ҡалала йәшәүселәр иғтибар ҙа итмәгән ҡышлаусы ҡоштарҙың көнитмеше лә уйландыра. Яҙғандары күңелгә яҡын, кешесә. Дамир, юғары материялар тураһында һүҙ сурытып, кемделер таң ҡалдырырға теләмәй, мәҙәниәтле булайыҡ тип өгөт-нәсихәт уҡымай, ғөмүмән, уның яҙмаларына аҡыл һатыу хас түгел. Ул үҙенә таныш, уратып алған донъяны ҡәҙерле, матур, зауыҡлы итеү яғында. Замандаштары хаҡында яҙһа, әйтерһең, әңгәмәсеһе янында баҫып тороп, гәзит уҡыусы менән һөйләшә. Проблема күтәрһә, Дамир артынан эйәреп, майҙанға сығып китке килә. Тәбиғәт тураһында бәйән иткәндә, гәзиттең йәки журналдың тап шул битенең йөрәк тибешен тойғандай булаһың. Бына бит ул ҡайҙа журналист һүҙенең көсө! Быйыл Өфөнөң “Инеш” нәшриәтендә ике телдә донъя күргән “Көн башы һуҡмаҡтары” автобиографик повесында яҙыусы Дамир Шәрәфетдиновтың ижади асылы ике яҡлап та асылған — журналист күҙәтеүҙәре, һығымталары шағир һиҙгерлеге, уның рухи тетрәнеүҙәре менән һуғарылған.